*Миңниса БАҺУМАНОВА*



# Йылҡы сырҡыраған ерҙә

*Әлеге Йылкы йылында нисек инде аттар тураһында яҙмайһың да, йылкы сыркыраған ергә — Башкортостандағы иң ҙур ипподром «Акбуҙат»ка бармайһың!*

Беҙҙең эраға тиклем VII быуатта ижад ителгән «Гуаньцзы» тигән трактатта (авторы Гуан Чжун) әйтелгәнсә, һыу — бөтә тере йәндәрҙең башланғысы. Кешеләрҙең дә, тимәк. Халыҡ ижадында тасуирланыуынса, әҙәми заттың мәңгелек юлдашы йылҡы ла һыуҙан сыҡҡан. Быны ҡытай ғалимы ғына раҫламай, беҙҙең башҡорт халҡы ла шулай тип иҫәпләй. Ысынлап та, боронғо иртәктәребеҙҙә — эпостарҙа раҫланғанса, «ер ҡалаҡтай, күк табаҡтай ғына булған» дәүерҙә донъяға башҡорт тоҡом аттарын Аҡбуҙат күлдән алып сыға, шуға ла халҡыбыҙ йылҡы малын үҙенә тиң күргән тиерлек һәм хатта изгеләштергән дә. Ибн Фаҙлан яҙып ҡалдырғанса, башҡорт ун ике аллаға табынған, шуларҙың береһе — Ат.

Бөгөн дә теге йәки был хужалыҡтарҙа йылҡы малын үрсетергә тырышабыҙ, ипподромдар, ҡымыҙ фермалары төҙөйбөҙ...

«Аҡбуҙат» ипподромында аттар, әлбиттә, ярыштар өсөн аҫырала һәм күнектерелә. Ат ярыштары — илаһи күренеш. Баш ҡалабыҙ Өфөнө буйлап аҡҡан Ҡариҙел йылғаһы ярының иң бейек өлөшөндә урынлашҡан ипподром трибуналарынан сабыштарҙы күҙәткәндә матурлыҡҡа, гәйрәт үә етеҙлеккә һоҡланаһың, күңел шул малҡайҙар ыңғайына әллә ҡайҙарға — бил-



"Акбуҙат" ипподромының директоры
Р.Ғ. Хантимеров



*Етештереү бүлеге етәксеһе Х.М.Килдеғошов*

дәһеҙ алыҫлыҡтарға-юғарылыҡтарға осҡандай!

Хәйер, тойғоларҙы ситкәрәк ҡуйып, һүҙҙе ипподром тигән ҡоролманың үҙенә ялғайыҡ әле. Уны «Башкиргражданпроект» институты проекты буйынса ҡорғандар. Ул егерме гектарға яҡын ерҙе биләй. Өс сектор бар: тамаша урындары, етештереү бүлеге һәм дә ипподром яланы. Шуларҙың эсенә спорт манежы, гараж, складтар, хужалыҡ ихатаһы, ветеринария дауаханаһы, һарай һәм башҡа ҡоролмалар инә.

Бәйге яланындағы призлы юлдың оҙонлоғо — 1067, киңлеге 24 метрға етә. Призлы юлдарға ваҡ таш, гранит валсыҡтары түшәлгән. Һыу йыйылыр булһа, уны торбалар йә канауҙар аша ағыҙып, юлды киптерәләр. Тап бына ошо ысул ипподромды йәйен-ҡышын, яҙын-көҙөн ҡулланырға мөмкинлек бирә. Ҡышҡыһын ҡар ҡатламы 5-10 сантиметрҙан артырға тейеш түгел.

Ярыш яланының ҡап уртаһында 75 х150 метрлыҡ конкур һәм 20 х 75 метрлыҡ еген майҙандары урынлашҡан. Күнекмә майҙаны ла бар.

— Киләсәктә ипподромдың мөмкинлектәрен арттырыу мәсьәләһе тора. Сабыш аттары аҫырау өсөн 320 урын кәрәк булһа, һыбайлылар, менге аттарына 60 урын бүлеү көҙ уңында тотола, — ти директор Рифғәт Ғәләүетдин улы Хантимеров. — Үҙ көсө, ныҡышмалы хеҙмәте, ғәйрәте менән ярыштарҙа еңгән, рекордтар ҡуйған һәм бөтә ғүмерен ат спортына арнаған спортсыларға маҡтаулы исемдәр юлларға ниәт тотам, сөнки быға тиклем Башҡортостанда уларға бер исем дә бирелмәгән. Бөтә донъя башҡорттарының II ҡоролтайын матур итеп үткәрер өсөн яныпкөйөп йәшәйбеҙ, ғөмүмән, һәр ярышыбыҙҙа республика исемен түбән төшөргөбөҙ килмәй. Шуға ла бында аттарҙы яратҡан кешеләр генә оҙаҡ йылдар эшләй ала...

Үҙенең 20 йыллығын билдәләргә йыйынған «Аҡбуҙат» ипподромының тарихы, әлбиттә, 1982 йылдан ғына башланмай. «Конезаводство» тигән журналдың 1891 йылғы һаны, мәҫәлән, Өфө ипподромына аҡса бүленеүе хаҡында хәбәр итә. Ул заманда Өфө земствоһының айғырҙарҙы бейәләргә ҡушыу һарайы менән бергә ат сабыштырыу майҙаны ҡала ситендә ҙур ғына ерҙе биләп торған. Йылҡы заводы һәм аттарҙы өйрәнеүсе баш идаралыҡ 1893—95 йылдарҙағы ярыштарҙа еңеүселәрҙе дәртләндереү өсөн финанс сығымдарын раҫлай — шунан сығып, Өфөлә тәүге ат сабыштары 1892 йылда үткәрелгән тиергә мөмкин... Хәйер, бәйгеләр кеше ат менән эш итә башлағандан бирле булып торған.

Үрҙә әйтелгән йылдарҙа Өфөлә «Ат сабыштарын һөйөүселәр ойошмаһы» ла барлыҡҡа килгән. Йәнә «Списки лошадей, бежавших и выигравших на всех ипподромах России» тигән китаптан (СПб., 1910) күренеүенсә, беҙҙән 33 юртаҡ ҡатнашҡан. Дыуан волосы Вознесенск ауылы крәҫтиәндәре заманында яҡшы тоҡомло Орлов юртаҡтары һатып ала һәм Дыуандың үҙендә 1906 йылда айғырҙарҙы бейәләргә ҡушыу пункты аса, бында 1909 йылда шулай уҡ йылҡы күргәҙмәһе лә эшләй. Профессор И.А. Сайгин Өфө губернаһының Өфө һәм Бөрө өйәҙҙәрендә 3-5 юртаҡ бейә, 40-лап сабыш аты тотоусылар булғанлығын асыҡлаған.

1925 йылда Өфөгә Томск ипподромынан Е.Царев саҡырыла, ул үҙе

менән бер өйөр Орлов юртаҡтары килтерә. Царев оҙаҡ йылдар ярыштарҙа ла ҡатнаша, судья-стартер ҙа булып эшләй. Владимир Царев әйтеүенсә, утыҙынсы йылдарҙа ипподромдың ат ҡараусылар һәм һыбайлылар әҙерләүсе үҙ мәктәбе булған. Әле иһә «Аҡбуҙат»та бындай мәктәп юҡ, шуға ла белгестәрҙе ситтән саҡырып килтерәләр, йәки ипподромдың үҙендә әҙерләйҙәр.

«Аҡбуҙат»та 84-се һөнәрселек-техник училище уҡыусыларының ғәмәли дәрестәре лә үткән. Был уҡыу йортон тамамлаусы Ю.Портновтың һәм А.Машинецтың уңыштары, мәҫәлән, күп нәмә тураһында һөйләй. Үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, училищелағы ипподром һыбайлылары әҙерләү бүлеген бөтөнләй ябып ҡуялар. Башҡортостанда тыуып үҫкән спортсыларға ихтыяждың бер ҙә кәмегәне юҡ.

«Аҡбуҙат» асылғандың икенсе йылында Өфөлә төрлө хужалыҡтар һәм йылҡы заводтары һыбайлыларының XXIV Бөтә Союз ярышы ойошторола. Бында әлегесә Урал зонаһы кимәлендәге сабыштар ҙа үткәрелгән, «Содружество» Ассоциацияһы тәкдиме менән Европаның кесе чемпионаты ла уҙғарылған. Рәсәй һәм Башҡортостан кимәлендә төрлө бәйгеләр булып тора. Тантаналы рәүештә үткәрелгән Башҡала көнө, Йәштәр көнө Өфө халҡы яратҡан мәҙәни сараларға әүерелде.

Былтыр Парижда «Рәсәй — Франция дуҫлығы» исеме аҫтында ат ярыштары үткәрелеп, унда Өфө дәүләт ат заводының (директоры Ш.Г.Рәхмәтуллин) Орлов тоҡомло Бомонд (1-се урын), Магнат (2-се урын), Кочет (6-сы урын) ҡушаматлы юртаҡтары ҡатнашҡан, ләкин беренсе урынды яулаусы һыбайлыһы Башҡортостан кешеһе түгел, йәрәбә буйынса был бәхет француз Жан-Мишель Базирға эләгә. Французлар, Бомондтың иң күркәм кәштәне биҙәрлек статуяһын шунда уҡ ҡойоп, ипподромдың генераль директоры Рифғәт Ғәләүетдин улы Хантимеровҡа бүләк итеп ҡайтара.

Әлбиттә, ҡасандыр йылҡысылыҡ ныҡ үҫешкән республикала ат ярыштарында ла яуланған уңыштар байтаҡ. Мәҫәлән, «Коневодство и конный спорт» журналында Рәсәйҙең атҡаҙанған зоотехнигы А.Моршенников былай тип яҙҙы: «Аҡбуҙат» ипподромында приз юлының сифатлы булыуы, һыбайлыларҙың үҙ оҫталыҡтарын күтәреүе, республика хужалыҡтарында үҫтерелгән юртаҡтар тоҡомоноң яҡшыртылыуы ипподромдың үҙ рекордтарын 161 тапҡыр яңыртырға мөмкинлек бирҙе» (1992, № 4, 13-се б.). Етмәһә, «Аҡбуҙат» 1984, 1986, 1990 йылдарҙа Рәсәйҙәге иң яҡшы ипподром тип танылған, шул сәбәпле 2001 йылғы Бөтә Рәсәй йылҡысыларының ярыштарын «Аҡбуҙат» ипподромында үткәрергә ҡарар ҡабул итәләр. Тимәк, тағы ла юғарыраҡ уңыштарға өлгәшерлек нигеҙ бар. Мастер һәм беренсе класлы һыбайлы спортсыларҙан В.Ф. Матусевич, В.П. Федосеева, Д.И. Краус, В.Е. Царев, В.В. Секисов, А.А. Машинец, Ю.К. Портнов, А.С. Отмахов, С.С. Искәндәров, Л.Р. Гуткина, спорт мастерҙарынан О.А. Данилова, С.Шишов, беренсе разрядлы һыбайлы спортсы А.Ю. Шерстобитова, икенсе категориялы һыбайлы спортсыларҙан И.Н. Юрасова, Л.В. Каргаполова һәм Рәсәй чемпионаттарында ат дағалау буйынса бик күп тапҡыр еңеүсе булған В.М. Герасимов кеүектәр призерҙар исемлегенә йыш эләгә. Бөтә Союз, Рәсәй күләмендәге ярыштарҙа В.Секисов



*Федосеева В.П.*

800-ҙән ашыу тапҡыр беренселекте алған, 29 рекорды бар. В.Матусевич 700-ҙән ашыу тапҡыр беренселекте яулаған һәм 18 рекорд ҡуйған. Республиканың йыйылма командаһы 1996, 1997, 2000 йылдарҙа Бөтә Рәсәй ярыштарында Рәсәй чемпионы була, Урал төбәге буйынса үткәрелгән ярыштарҙа һыбайлылар кубогын 6 тапҡыр, йылҡысылар кубогын 12 тапҡыр яулай.

Йыйылма командаларға ярыш аттары оҙайлы һынау аша алына, бында юртаҡтарҙың һаулығынан тыш сыҙамлылығы, холҡо ла үлсәүгә һалына. Күп ярыштарҙа ал бирмәй елгән юртаҡтар һәм менге аттары: Кагуляр (Благовар районы «Мир» колхозыныҡы), Гаррисбург , Капитолий («Аҡбуҙат» ипподромыныҡы), Гитис («Өфөагрогаз» йәмғиәтенеке), Пират, Ситроен, Ловкий (Күгәрсен районынан), Десмос, Транзит, Сибәркүл (Илеш районынан), Баден (Нефтекама ҡалаһының эске эштәр идаралығыныҡы).

«Акбуҙат» ипподромы коллективы Учалы районының «Маяҡ» крәҫтиән-фермер хужалығы ( директоры Р.М. Ғилманов), Иглин районының Һиҙиәтуллин крәҫтиән хужалығы (директоры Х.С. Һиҙиәтуллин) һәм Йәрмәкәй районының «Родина» агрофирмаһы (директоры (М.В. Нәсибуллин) менән берлектә эш итә. Бынан тыш, ат спорты өсөн Дүртөйлөнән «Арғымаҡ» (директоры Ф.Р. Хәкимов), Мәләүездән «Толпар» (директоры А.А. Шәрәфетдинов), Илештән «Ҡара юрға» (А.Гилданов) һәм Учалынан «Ирәмәл» комплекстары ат спортын үҫтереүгә бик күп көс һала.

Ипподромда республика хужалыҡтарында үҫтерелгән юртаҡтар ғына һынап ҡаралмай, Рәсәй йылҡы заводтары өсөн дә киң мөмкинлектәр асыла. Ике тиҫтә йыл эсендә өс меңгә яҡын тоҡомло ат һыналған, 2.10 класлы —105, 2.08 кластлы — 48 һәм 2.05 класлы 12 юртаҡ айырып алынған.

Йылҡы малын ҡарау-тәрбиәләү ҙур сығымдар талап итә. Һәр атҡа тәүлегенә 6 килограмм һоло талап ителә, йәнә 8 килограмм бесән. Минераль витамин ҡатнашмалары бирелә. Ипподромға бюджеттан, ат хужаларынан, ярҙамсы хужалыҡтарҙан аҡса килә, әммә былар ҙа аҙ. Тотализатор ҡуйыу әлегә көткән өмөттө аҡламай.

— Элекке традицияларҙы тергеҙеү өсөн аҡсаһы ла, ваҡыты ла кәрәк. Аттарҙы төрлө кимәлдәге ярыштарға алып йөрөтөү өсөн, заман талаптарына ярашлы махсуслашҡан машинабыҙ ҙа булһын ине, — ти етештереү бүлеге етәксеһе Халис Килдеғошов, — шунлыҡтан транспорт һорап бүтәндәргә мөрәжәғәт итергә мәжбүрбеҙ.

Үрҙә телгә алғаныбыҙса, хөкүмәттең Башҡортостанда йылҡысылыҡты үҫтереүгә бәйле махсус ҡарарҙары сығып тора. Шулай ҙа ат спортына иғтибар йәһәтенән саралар планын хужалыҡтарҙа тағы ла киңәйтһәк ине. Ошоно «Аҡбуҙат» етәкселеге үҙе беренсе планға ҡуя, уларҙың теләге бер: юртаҡтарыбыҙ күп булһын да ярыштарҙа республика исеме гөрләп торһон!

«Аҡбуҙат»та шәхси аттар ҙа тотола тигәйнек. Ысынлап та, хәҙер байҙар етерлек, күптәре йылҡы малына ҡыҙыға. Был йәһәттән бокс буйынса ике тапҡыр Европа чемпионы, Башҡортостандың ат спорты федерацияһы президенты Валерий Лимасовтың, шулай уҡ эшҡыуар Александр Шагаевтың тырышлығы маҡтауға лайыҡ. «Аҡбуҙат» ипподромы хеҙмәткәрҙәре халыҡты ошо шөғөлгә йәлеп итергә тырыша, ат спортын үҫтерерлек төрлө юлдарҙы, мәҙәни сараларҙы эҙләй.

«Аҡбуҙат» исеменә бәрәбәр «Таңсур», «Турсанай», «Ҡара юрға», «Осҡор» кеүек матур яңғырашлы ат ҡушаматтары исемлеген төҙөү телсе ғалимдарыбыҙҙың мөҡәддәс бурысы булып ҡала: әйтеүгә лә еңел булһын, сит телдәрҙә лә яңғыраш тапһын. Әлегә юртаҡтарға атаһы менән әсәһененең ҡушаматы ҡатнашмаһынан төҙөлгән исем бирелә. Эш өсөн дә, иҫтә ҡалдырыу өсөн дә еңел тиҙәр.

Беҙ киләһе Йылҡы йылынаса — 2014 йылғаса — «Ватандаш» журналын уҡыусылар Башҡортостандың ат спортсыларының донъя ярыштарындағы бик күп еңеүҙәренә ҡыуаныс кисереп йәшәр тигән өмөттә ҡалабыҙ.

*Фәрит Ғилмияров фотолары.*